**МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ**

**Министерство образования и науки Республики Башкортостан**

**Администрация муниципального района Бураевский район Республики Башкортостан**

**МОБУ СОШ д. Ваныш-Алпаутово**

| РАССМОТРЕНО | СОГЛАСОВАНО | УТВЕРЖДЕНО |
|---|---|---|
| Руководитель ШМО учителей начальных классов | Заместитель директора по УВР | Директор |
| _____________ Усманова Э.Ф. | _____________ Шарипова М.Д | _____________ Хабибуллин Ф.Я |
| Протокол № 1 от «20» августа 2024 г. | Протокол № 1 от «26» августа 2024 г. | Приказ № 38 от «30» августа 2024 г. |

**Рабочая программа**

По предмету (курсу) Родной (башкирский) язык

Уровень образования начальное общее образование

Класс 3-4

Составитель:
Габбасова Юлия Фидиятовна
(учитель начальных классов)

Ваныш- Алпаутово, 2024 г

**МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ**

**Министерство образования и науки Республики Башкортостан**

**Администрация муниципального района Бураевский район Республики Башкортостан**

**МОБУ СОШ д. Ваныш-Алпаутово**

| РАССМОТРЕНО | СОГЛАСОВАНО | УТВЕРЖДЕНО |
| --- | --- | --- |
| Руководитель ШМО учителей начальных классов | Заместитель директора по УВР | Директор |
| ________________________ | ________________________ | ________________________ |
| Усманова Э.Ф. | Шарипова М.Д | Хабибуллин Ф.Я |
| Протокол № 1<br>от «20» августа 2024 г. | Протокол № 1<br>от «26» августа 2024 г. | Приказ № 38<br>от «30» августа 2024 г. |

**Рабочая программа**

По предмету (курсу) Родной (башкирский) язык
Уровень образования______начальное общее образование___
Класс__3-4 _

Составитель:
Габбасова Юлия Фидиятовна
(учитель начальных классов)

Ваныш- Алпаутово, 2024 г

**Уҡыу предметын, курсын өйрәнеүҙең планлаштырылған *шәхсән, метапредмет һәм предмет* һөҙөмтәләре**

Предметтың *шәхсән һөҙөмтәләре*булып түбәндәгеләр тора:

-тел кешеләрҙең аралашыу сараһы икәнде аңлау, үҙләштереү;

-башҡорт телен милли мәҙәниәттең бер күренеше тип ҡабул итеү;

- аралышыуҙа рус теленән алған башҡорт телендә тәржемә итеп ҡуллана белеү;

-башҡорт теленән алынған белем һәм күнекмәләрҙе мәктәптә һәм көндәлек тормошта ҡулланыу;

-аралышыуҙа рус теленән алған башҡорт телендә тәржемә итеп ҡуллана белеү;

-башҡорт телен башҡорт халҡының мәҙәни һәм рухи байлығын өйрәнеү сараһы булараҡ ҡулланыуҙы аңлау;

-үҙ телмәренә иғтибарлы булып үҙ-үҙен баһалау һәләтлелеге үҫтереү.

***Метапредмет һөҙөмтәләр*** булып универсаль эш төрҙәрен формалаштырыу тора.

Регулятив УЭТ*:*

-уҡытыусы ярҙамында дәрестә эш маҡсатын билдәләү;

-дәрестә эштең эҙмә-эҙлеклелеген билдәләү;

-уҡытыусы тәҡдим иткән план буйынса эшләргә өйрәнеү.

Танып белеү УЭТ:

-китап менән эшләй белеү (шартлы тамғаларҙы айырыу)

-уҡытыусы һәм уҡыусыларҙың берҙәм эшенә баһа биреү.

Коммуникатив УЭТ:

-башҡаларҙың телмәрен тыңлау һәм аңлау;

-уҡытыусы менән берлектә класташтар менән үҙеңде нисек тотоу һәм аралашыу ҡағиҙәләре тураһында һөйләшеү һәм уларҙы үтәү;

-икәүләп, төркөмдә эшләргә өйрәнеү; төрлө ролдәр башҡарыу (лидер, башҡарыусы)

-яңғыраған телмәрҙе (ололарҙың һәм тиңдәштәреңдең әйтеүе) адекват ҡабул итеү;

-һүҙҙәрҙе, ижектәрҙе, өндәрҙе һәм һөйләмде төҙөү, әйтеү буйынса белем һәм күнекмәләр;

-бирелгән тема буйынса диалог төҙөй белеү; һорауҙарға ҡыҫҡа һәм тулы яуап биреү, диалогты башлай һәм тамамлай белеү;

-таныш орфографик ҡағиҙәләрҙе ҡулланып, уҡытыусы ярҙамында һәм үҙ аллы өйрәнеүҙә контроль характерҙа яҙма эштәрҙе башҡара белеү;

-үҙ аллы эшен тикшерә һәм башҡорт теленән предмет-ара (башҡа предмет дәрестәрендә) үҙ белемеңде анализлай белеү;

-төп предметтан предмет-ара аңлатмаларҙы үҙләштереү;

-мәктәптә һәм мәктәптән тыш ҡыҙыҡһыныуҙарынан сығып, башҡорт телендә аралышыу.

***3 класта*** курсты өйрәнеүҙең ***предмет һөҙөмтәләре*** булып түбәндәгеләр тора:

-башҡорт әҙәби теле нормалары (орфоэпик, лексик, грамматик) һәм телмәр этикеты ҡағиҙәләре тураһында башланғыс төшөнсә алыу;

-орфографик ҡағиҙәләрҙе һәм тыныш билдәләрен (өйрәнелгән күләмдә) ҡуйыу ҡағиҙәләрен белеү;

-өн, хәреф, һүҙ өлөшө, телмәр киҫәге, һөйләм киҫәге, ябай һөйләм кеүек тел берәмектәрен таба, сағыштыра, классификациялай (бүлә), ҡылыҡһырлай (характеристика бирә) алыу оҫталығы;

-үҙеңдең ғәмәлдәреңде контролдә тотоу, әйткәнде һәм яҙғанды тикшерә белеү һәләтлеге.

-өндәрҙе дөрөҫ әйтеү, һүҙҙе ижектәргә бүлеү, баҫым ҡуйыу, баҫымлы һәм баҫымһыҙ һүҙҙәрҙе айырыу;

-һүҙҙәрҙе юлдан юлға күсереү өсөн өлөштәргә бүлеү;

-һүҙгә өн-хәреф анализы яһау;

-һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе, тексты дөрөҫ күсереү, яҙылғанды тикшереү, өлгө менән сағыштырыу;

-исем-фамилияларҙа, хайуан ҡушаматтарҙа, географик атамаларҙа ҙур хәрефте хатаһыҙ яҙыу;

-башҡорт теленән рус теленә тәржемә итеү.
Хәрефтәрҙе дөрөҫ тоташтырып яҙыу:
-бәләкәй текст күсереү;
-әҙерлектән һуң өйрәтеү характерындағы диктант яҙыу (изложение, инша (2-4 һөйләм күләмендә);
-һүҙҙәрҙең предметты, билдәне, эш-хәрәкәтте белдереүен үҙләштереү;
-предметты белдереүсе һүҙҙәрҙең яңғыҙлыҡ, уртаҡлыҡ, берлек, күплек мәғәнәләрен аңлау, ҡулланыу;
-предмет исемдәренең ваҡыт, урын, эйәлек мәғәнәләрен төшөнөү.

**4 *класта предмет һөҙөмтәләре*** булып түбәндәгеләр тора:
-башҡорт әҙәби теле нормалары (орфоэпик, лексик, грамматик) һәм телмәр этикеты ҡағиҙәләре тураһында башланғыс төшөнсә алыу;
-орфографик ҡағиҙәләрҙе һәм тыныш билдәләрен (өйрәнелгән күләмдә) ҡуйыу ҡағиҙәләрен белеү;
-өн, хәреф, һүҙ өлөшө, телмәр киҫәге, һөйләм киҫәге, ябай һөйләм кеүек тел берәмектәрен таба, сағыштыра, классификациялай (бүлә), ҡылыҡһырлай (характеристика бирә) алыу оҫталығы;
-үҙеңдең ғәмәлдәреңде контролдә тотоу, әйткәнде һәм яҙғанды тикшерә белеү һәләтлеге;
-тел нормаларына ярашлы телмәр өндәрен әйтеү;
Хәрефтәрҙе дөрөҫ һәм матур яҙыу, дөрөҫ тоташтырыу:
-ижади диктанттар, өйрәтеү изложениелары һәм иншалар яҙыу;
-иптәшең яҙғанын һәм үҙ яҙмаларыңды тикшереү, камиллаштыра белеү күнекмәләре;

**Уҡыу предметы, курстың йөкмәткеһе**

Тыңлау. Телдән аралышыуҙың маҡсатына һәм ситуацияһына төшөнөү. Яңғырап торған телмәрҙе адекват ҡабул итеү.
Һөйләү. Коммуникатив бурысты эффектив хәл итеү өсөн, аралашыуҙың маҡсаттарына һәм шарттарына ярашлы тел сараларын һайлау. Телмәрҙең диалог функцияһына ғәмәлдә эйә булыу.
Һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе, һөйләмдәрҙе аңлап уҡыу.
Һүҙҙе тотош уҡыуға күскән осорҙа орфоэпик уҡыу менән танышыу. Орфографик уҡыу (шыбырҙап ижекләп әйтеү) - әйтеп яҙҙырғанда һәм күсереп яҙғанда үҙконтроль сараһы.
Яҙыу. Грамотаға өйрәтеү системаһында хәреф, хәрефтәр бәйләнешен, ижектәрҙе, һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе яҙыу. Яҙыу төрө кеүек уҡытыу эшмәкәрлегенә тура килгән гигиеник талаптарҙы үтәп, аңлайышлы, бөхтә яҙырға өйрәтеү. Өйрәнелгән ҡағиҙәләргә тап килтереп күсереп яҙыу, әйтеп яҙҙырыу. Тыңланылғанһәм ентекле, һайланма уҡылған тесты теҙеп яҙа алыу (изложение). Балаларға ҡыҙыҡлы темалар буйынса үҙҙәренең кескәй текстарын төҙөтөү.
Яҙыуға ҡарата гигиеник талаптарҙы үҙләштереү. Бармаҡтарҙың ваҡ моторикаһын һәм ҡулдарҙың хәрәкәт азатлығын үҫтереү. Дәфтәр бите һәм класс таҡтаһы арауығында дөрөҫ ориентация оҫталығын үҫтереү, ҙур һәм бәләкәй яҙма хәрефтәрҙе яҙыуҙы үҙләштереү.
Хәрефтәрҙе, хәрефтәр бәйләнешен, ижектәрҙе, һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе гигиеник нормаға ярашлы яҙыу. Аңлайышлы һәм ыҡсым яҙырға өйрәнеү. Әйтелеше менән яҙылышы айырылмаған (оҡшаш) һүҙҙәрҙе һәм һөйләмдәрҙе әйттереп яҙҙырыу (диктант). Тексты дөрөҫ күсереп яҙыу алымдарын һәм тәртибен өйрәтеү.
Хәүефһеҙ график сараларҙың: һүҙҙәр араһында ҡалдырылған буш урын, юлдан юлға күсереү билдәһенең функцияһын аңлау.
Һүҙ һәм һөйләм. Һүҙҙе өйрәнеү объекты, анализлау материалы итеп ҡабул итеү. Һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлау буйынса күҙәтеүҙәр ойоштороу. Һүҙ һәм һөйләмде айырыу. Һөйләм менән эшләү: һүҙҙәрҙе айырып алыу, уларҙың тәртибен үҙгәртеү.
Орфография. Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләре һәм уларҙы ҡулланыу менән танышыу:
- һөйләм башында, яңғыҙлыҡ исемдәрҙә баш хәреф;
- һүҙҙәрҙе айырып яҙыу;
- һүҙҙәрҙе ижекләп юлдан юлға дөрөҫ күсереү;

- һөйләм аҙағында тыныш билдәләре.

Системалы курс

Фонетика һәм орфоэпия. Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙе айырыу. Ҡалын һәм нәҙек өндәрҙе айырыу, ҡалынлыҡ-нәҙеклек буйынса парлы һәм парһыҙ тартынҡы өндәрҙе билдәләү. Яңғырау һәм һаңғырау тартынҡы өндәрҙе айырыу, парлы һәм парһыҙ яңғырау һәм һаңғырау өндәрҙе билдәләү. Өндөң сифат буйынса характеристикаһын билдәләү: һуҙынҡы – тартынҡы; ҡалын - нәҙек һуҙынҡы, парлы-парһыҙ яңғырау һәм һаңғырау тартынҡы. Һүҙҙәрҙәе ижектәргә бүлеү. Башҡорт әҙәби теле нормаларына ярашлы өндәрҙе һәм өндәр бәйләнешен дөрөҫ әйтеү. Һүҙҙе фонетик тикшереү.

График. Өндәрҙе һәм хәрефтәрҙе айырыу. Яҙыуҙа ҡалынлыҡ-нәҙеклекте билдәләү. Тартынҡы өндәрҙе яҙыуҙа сингармонизм принцибына таяныу. Хәрефһеҙ график саралары: араһында ҡалдырылған буш урын, юлдан юлға күсереү билдәһен, абзацты ҡулланыу. Алфавитты белеү: хәрефтәрҙе дөрөҫ атау, уларҙың тәртибен белеү. Алфавитты һүҙлектәр, белешмәләр менән эшләгәндә файҙаланыу.

Лексика. Һүҙҙең лексик һәм грамматик мәғәнәләре. Мәғәнәләрен аныҡларға кәрәкле һүҙҙәрҙе айырып алыу. Бер мәғәнәле һәм күп мәғәнәле, тура һәм күсмә мәғәнәле һүҙҙәр менән таныштырыу.

Һүҙ составы (морфемика). Тамырҙаш һүҙҙәр төшөнсәһен үҙләштереү. Тамырҙаш һүҙҙәр менән бер үк һүҙҙең төрлө формалары араһындағы айырма. Тамырҙаш һүҙҙәрҙе һәм синонимдарҙы, тамырҙаш һүҙҙәр һәм омонимик тамырлы һүҙҙәрҙе айырыу. Айырып алына торған бер үк төрлө морфемалы һүҙҙәрҙә ялғау, тамырҙар, нигеҙ билдәләү. Һүҙҙе составы буйынса тикшереү.

Морфология. Һүҙ төркөмдәре. Һүҙ төркөмдәрен үҙ паллы һәм ярҙамсы төрҙәргә бүлеү.

Исем. Телмәрҙәге роле, ҡулланылышы. Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе таба белеү. Кем?, нимә? һорауҙарына яуап булып килгән исемдәрҙе айырыу, рус теле менән сағыштырыу. Исемдәрҙең һан менән үҙгәреше. Исемдәрҙең килеш менән үгәреше. Килеш һорауҙары буйынса айырыу. Исемдәргә морфологик анализ.

Сифат. Телмәрҙәге әһәмиәте һәм ҡулланылышы. Сифаттың һан һәм килеш менән үҙгәреше. Сифатҡа морфологик анализ.

Алмаш. Алмаш тураһында дөйөм төшөнсә. Зат алмаштары, роле, ҡулланылышы. Берлектәге һәм күплектәге I, II, III зат алмаштары.

Ҡылым. Телмәрҙәге әһәмиәте һәм ҡулланылышы. Ҡылымдарҙың инфинитив (башланғыс) формаһы. Ҡылымдың заман менән үҙгәреше. Хәҙерге, үткән, киләсәк заман ҡылымдарының зат һәм һан менән үҙгәреше, барлыҡ-юҡлыҡ формалары. Ҡылымға морфологик анализ.Рәүеш. Телмәрҙәге әһәмиәте һәм ҡулланылышы. Рәүеш төркөмсәләре.

Ярҙамсы һүҙҙәр. уларҙың мәғәнәһе, һөйләмдәге роле.

Синтаксис. Һөйләмдең, һүҙбәйләнештең, һүҙҙең айырмаһы. Һөйләү маҡсаты буйынса һөйләмдәрҙе хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәргә айырыу.

Һөйләмдең баш киҫәктәрен: эйә һәм хәбәрҙе табыу. Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәрен айырыу. Мәғәнәүи һорауҙар ярҙамында һүҙбәйләнештәге һәм һөйләмдәге һүҙҙәр араһында бәйләнеш булдырыу. Теркәүесһеҙ һәм *һәм, ә, ләкин* теркәүестәре менән килгән тиң киҫәкле һөйләмдәрҙе табыу һәм үҙ аллы төҙөй белеү. Тиң киҫәкле һөйләмдәрҙә һанау интонацияһын ҡулланыу. Ябай һәм ҡушма һөйләмдәрҙе айырыу.

Орфография һәм пунктуация. Орфографик үткерлек формалаштырыу, һүҙҙәге орфограмманың урынына ҡарап, дөрөҫ яҙыу ысулын һайлау. Орфографик һүҙлек ҡулланыу. Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен ҡулланыу:

- һүҙҙе юлдан юлға күсереү
- һөйләм башындағы һәм яңғыҙлыҡ исемдәрҙәге яҙыу хәрефе
- һүҙ тамырындағы парлы яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар
- ъ һәм ь айырыу билдәләре
- һөйләм аҙағында тыныш билдәләре: нөктә, һорау һәм өндәү билдәләре
- тиң киҫәкле һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.

Телмәр үҫтереү. Аралашыу ситуацияһын аңлау: ниндәй маҡсат менән, аралышыу кем менән, ҡайҙа бара тип үҙләштереү. Үҙ фекереңде дәлилләп әйтеү.

Аралышыуҙы алып барыу оҫталығына (һөйләшеүҙе башлау, ҡеүәтләү, кемдеңдер иғтибарын йәлеп итеү, үҙләштереү һ.б.) өйрәтеү. Уҡытыу һәм көнкүреш аралашыу ситуацияларында

телмәр этикеты нормаларын (сәләмләү, хушлашыу, ғәфү үтенеү, үтенес менән мөрәжәғәт итеү) үҙләштереү.
Яҙма телмәрҙең теүәллеген, дөрөҫлөгөн, байлығын һәм тасуирилығын иҫәпкә алып, үҙ текстарын төҙөү һәм бирелгән текстарҙы яҡшыртыу; текстарҙа синонимдар һәм антонимдар ҡулланыу.
Изложение (ентекле теҙеп яҙыу) һәм иншаларҙың үҙенсәлеге менән (билдәләмәһен ятлатмай ғына) таныштырыу: ентекле теҙеп яҙыу (изложение), инша элементтары ҡулланып яҙылған изложение, хикәйәләү, тасуирлау иншаһы, фекер йөрөтөүгә ҡоролған инша.

**Уҡыу предметының төп йөкмәткеһе**

**3 класс**

Һөйләм төҙөлөшө. Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәрҙә интонация. Һандар. Ижек. Баҫым. Һүҙҙәрҙе юлдан юлға күсереү. Ҡылымдарҙың зат ялғауҙары. Башҡорт телендә эйәлек мәғәнәһе. К, Ҡ, П хәрефтәренең Г, Ғ, Б-ғ күсеү осраҡтары.-лы, -ле, -ло, -лө ялғауҙары.Яя, Юю, Ее хөрефтәренең яҙылыш үҙенсәлектәре. Тартынҡылыр. Һуҙынҡылар. Нindәй? Ҡасан? Ни эшләй? һорауҙары. Һөйләмдең баш киҫәктәре.

**4 класс**

Телмәр. Телмәр төрҙәре. Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре. Тарҡау һәи йыйнаҡ һөйләмдәр. Һүҙбәйләнеш. Бер һәм күп мәғәнәле һүҙҙәр. Һүҙ составы. Яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙар. Ҡушма һүҙҙәр. Исем. Исемдең эйәлек заты. Исемдең килеш менән үҙгәреше. Сифат. Сифат дәрәжәләре. Һан. Эйәлек алмаштары. Зат алмаштары. Ҡылым. Ҡылымдың зат, заман, һан формалары.

**Туған (башкорт) теленән календарь-тематик план 3 класс.**

| № урока | Дата | | Бүлек,темаисеме | сәғәт тәр һаны | |
|---|---|---|---|---|---|
| | план | факт | | | |
| 1 | | | Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре | 1 | |
| 2 | | | – мы,-ме,-мо,- мө һорау киҫәксәләре. | 1 | |
| 3 | | | Кеше фамилиялары, уларҙың дөрөҫ яҙылышы.Контроль күҫереп яҙыу. | 1 | |
| 4 | | | Кем? Нимә? Һорауҙарына яуап биреүсе һүҙҙәр. | 1 | |
| 5 | | | Һүҙ. Һөйләм. | 1 | |
| 6 | | | Хәрәкәтте белдергән һүҙ. | 1 | |
| 7 | | | Һорау һөйләм. | 1 | |
| 8 | | | Өндәү һөйләм. | 1 | |
| 9 | | | Өн,хәреф. | 1 | |
| 10 | | | Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар. | 1 | |
| 11 | | | Тартынҡы өндәр | 1 | |
| 12 | | | Ижек.Ни эшләНи эшләй һорауҙары.Ҡала ауыл исемдәре. | 1 | |
| 13 | | | Нисәнсе? Ҡасан? һорауы. | 1 | |
| 14 | | | Һүҙ. Ижек. | 1 | |
| 15 | | | Ни эшлә? ни эшләй? ни эшләйем? һорауҙары. | 1 | |
| 16 | | | Ни эшлә? ни эшләй? ни эшләйем? һорауҙары. | 1 | |
| 17 | | | Ни эшлә? ни эшләй? ни эшләйем? һорауҙары. | 1 | |
| 18 | | | Ҡайҙа йәшәйһең? һорауы | 1 | |
| 19 | | | Һүҙҙе юлдан юлға күсереү. | 1 | |
| 20 | | | Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек? | 1 | |
| 21 | | | Минең алмашы. Һүҙлек эше. Һүҙлек диктанты. | 1 | |
| 22 | | | Һинең алмашы. | 1 | |
| 23 | | | Унын алмашы. | 1 | |
| 24 | | | Ҡ- Ғ, К-Г,Б-П өн хәрефенең сиратлашыуы. | 1 | |
| 25 | | | Ҡ- Ғ, К-Г,Б-П өн хәрефенең сиратлашыуы. | 1 | |
| 26 | | | Эйәлек заты ялғауҙары. | 1 | |
| 27 | | | Беҙҙең алмашы. | 1 | |
| 28 | | | Һеҙҙең алмашы. | 1 | |
| 29 | | | Уларҙың алмашы. | 1 | |
| 30 | | | -лы, -ло,-ле,-лө ялғауҙары. | 1 | |
| 31 | | | Э- хәрефе һәм өнө. | 1 | |
| 32 | | | Е- хәрефе һәм өнө. | 1 | |
| 33 | | | -һыҙ,- һеҙ ялғауҙары. | 1 | |
| 34 | | | -Ма – мә ялғауҙары. Юҡлыҡ мәғәнәле ялғауҙар. | 1 | |
| 35 | | | Яя хәрефенең яҙылышы. | 1 | |
| 36 | | | Юю хәрефенең яҙылышы. | 1 | |
| 37 | | | Нимә менән? Ни хаҡ тора? һорауҙары. | 1 | |
| 38 | | | **Контроль күсереү.Класта.** | | |
| 39 | | | Хаталар өҫтөндә эш.Ни эшләйбеҙ? Ни | 1 | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | эшләйһегеҙ? һорауҙары. | | |
| 40 | | | В- хәрефе һәм өнө. | 1 | |
| 41 | | | Нимә менән? һорауы. Йә, йе ҡушылмалары. | 1 | |
| 42 | | | Ҡайҙа? Ҡайҙан? һорауҙары. *Менән* ярҙамсы һүҙе. | 1 | |
| 43 | | | **Контроль диктант.”Баҙарҙа”** | 1 | |
| 44 | | | Хаталар өҫтөндә эш Ни эшләйҙәр? Йо,йө ҡушылмалары. | 1 | |
| 45 | | | Йы, йү ҡушылмалары. | 1 | |
| 46 | | | **Һүҙлек эше. Һүҙлек диктанты.** | 1 | |
| 47 | | | К – ҡ өндәре. | 1 | |
| 48 | | | Ҙ ҙ хәрефе, -ҙар, - ҙәр күплек ялғауҙары | 1 | |
| 49 | | | Х х – Һ һ хәрефтәре. Һеҙгә нимәне күрһәтергә? | 1 | |
| 50 | | | С, ҫ хәрефе.Ниндәй? һорауы. | 1 | |
| 51 | | | Ғ ғ – Г г хәрефтәре. Билдә һүҙҙәре. | 1 | |
| 52 | | | **Изложение. Яңы кейем.** | 1 | |
| 53 | | | Хаталар өҫтөндә эш.Н н – ң хәрефе. | 1 | |
| 54 | | | Нимә белдек?  нимәгә өйрәндек? | 1 | |
| 55 | | | Ц ц хәрефе. | 1 | |
| 56 | | | Ч,щ хәрефе. | 1 | |
| 57 | | | Ъ- ь билдәләре. | 1 | |
| 58 | | | Хайуан ҡушаматтарының дөрөҫ яҙылышы. | 1 | |
| 59 | | | Парлы яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар. | 1 | |
| 60 | | | Алфавит.**Һүҙлек эше. Һүҙлек диктанты.** | 1 | |
| 61 | | | Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек? | 1 | |
| 62 | | | Һөйләм. Хикәйә һөйләм.( Ҡабатлау) | 1 | |
| 63 | | | Һорау һөйләм. Өндәү һөйләм. ( Ҡабатлау) | 1 | |
| 64 | | | Кем? нимә? Һорауҙары. Һөйләмдең баш киҫәктәре. | 1 | |
| 65 | | | Ни эшләй?һорауына яуап булыусы һүҙҙәр. | 1 | |
| 66 | | | Ниндәй? Һорауы. Ярҙамсы һүҙҙәр. | 1 | |
| 67 | | | **Контроль диктант. Муйнаҡ.** | 1 | |
| 68 | | | Үтелгәндәрҙе дөйөмләштереп  ҡабатлау. | 1 | |
| 69 | | | Үтелгәндәрҙе дөйөмләштереп  ҡабатлау. | 1 | |
| 70 | | | Йомғаҡлау. | 1 | |

**Туған (башкорт) теленән календарь-тематик план 4 класс.**

| № | Дата | | Бүлек, тема исеме | сәғәт тәр һаны | |
|---|---|---|---|---|---|
| | план | факт | | | |
| 1 | | | Телмәр һәм тел. | 1 | |
| 2 | | | Текст һәм уның планы | 1 | |
| 3 | | | Тикшереү диктанты | 1 | |
| 4 | | | Текст төрҙәре | 1 | |
| 5 | | | Өндәш һүҙ | 1 | |
| 6 | | | Һөйләм нигеҙе.Тарҡау һәм йыйнаҡ һөйләмдәр | 1 | |
| 7 | | | Ҡонтроль диктант “Ҡымыҙ” | 1 | |
| 8 | | | Һөйләмдең эйәрсен киҫәктәре | 1 | |
| 9 | | | Аныҡлаусы. | 1 | |
| 10 | | | Тултырыусы | 1 | |
| 11 | | | **Хәл.Инша.** | 1 | |
| 12 | | | Тиң киҫәктр.Контроль диктант. | 1 | |
| 13 | | | Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек? ҡабатлау | 1 | |
| 14 | | | Һүҙбәйләнеш | 1 | |
| 15 | | | **Контроль диктант. Көҙ.** | 1 | |
| 16 | | | Хаталар өҫтөндә эш. Башҡорт теленең һүҙлек составы. | 1 | |
| 17 | | | Тура һәм күсмә мәғәнәле һүҙҙәр | 1 | |
| 18 | | | Һүҙ составы. **Контроль күсереп яҙу. Көҙ биҙәктәре.** | 1 | |
| 19 | | | Тамырҙаш һүҙҙәр. Ялғауҙар | 1 | |
| 20 | | | Һүҙ төҙөлөшө | 1 | |
| 21 | | | Ҡушма һүҙҙәр | 1 | |
| 22 | | | Ҡушма һүҙҙәрҙең яһалыу юлдары | 1 | |
| 23 | | | Алфавит. Палиндромондар | 1 | |
| 24 | | | Е, ё, ю, я хәрефтәре | 1 | |
| 25 | | | **Һүҙлек эше. Һүҙлек диктанты.** | 1 | |
| 26 | | | Хаталар өҫтөндә эш. Ярҙамсы һүҙҙәр. | 1 | |
| 27 | | | Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек? “Һүҙ төркөмдәре” темаһын нығытыу | 1 | |
| 28 | | | Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр | 1 | |
| 29 | | | Күплек ялғауҙары. | 1 | |
| 30 | | | **Контроль диктант. Ҡар бөртөктәре.** | 1 | |
| 31 | | | Хаталар өҫтөндә эш .Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 1 | |
| 32 | | | Исемдәрҙең эйәлек заты менән берлектә үҙгәреше | 1 | |
| 33 | | | Исемдәҙең эйәлек заты менән күплектә үҙгәреше | 1 | |
| 34 | | | Фонетик күнегеүҙәр. **Һүҙлек эше. Һүҙлек диктанты.** | 1 | |
| 35 | | | Исемдәрҙең эйәлек килештә үҙгәреше | 1 | |
| 36 | | | Исемдәрҙең килештә үҙгәреше | 1 | |
| 37 | | | **“Минең ауылым” проект эше** | 1 | |
| 38 | | | -ль, -нь, -брь, -сь, -рь, -чь ялғауҙарына | 1 | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | бөткән һүҙҙәргә ялғауҙарҙың ҡушылыуы | | |
| 39 | | | Парлы тартынҡылар | 1 | |
| 40 | | | -ст, -сть, -зд, -фт, -ск, -нк тамырҙарын бөткән һүҙҙәрҙә ялғауҙарҙың ҡушылыуы | 1 | |
| 41 | | | Исемгә морфологик анализ. | 1 | |
| 42 | | | Сифат. Сифат дәрәжәләре | 1 | |
| 43 | | | Төп һәм шартлы сифаттар | 1 | |
| 44 | | | Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек? “Сифат” темаһын нығытыу | 1 | |
| 45 | | | **Изложение.Ҡоралай.** | 1 | |
| 46 | | | Хаталар өҫтөндә эш.Һан. Ябай һәм ҡушма һандар | 1 | |
| 47 | | | Төп һәм рәт һандары | 1 | |
| 48 | | | Һандарҙың килештә үҙгәреше | 1 | |
| 49 | | | Алмаштар | 1 | |
| 50 | | | Алмаштарҙың килештә үҙгәреше | 1 | |
| 51 | | | **Контроль диктант.Яҙ һулышы.** | 1 | |
| 52 | | | Хаталар өҫтөндә эш. Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек? Алмаштарҙы ҡабатлау | 1 | |
| 53 | | | Ҡылымдар. Яһалышы. | 1 | |
| 54 | | | Ҡылымдыңзаманформалары. **Һүҙлек диктанты.** | 1 | |
| 55 | | | Хаталар өҫтөндә эш.Үткән заман ҡылымдарының зат менән үҙгәреше. | 1 | |
| 56 | | | Ҡылымдыңбарлыҡ-юҡлыҡкатегорияһы. | 1 | |
| 57 | | | Хәҙерге заман берлек һәм күплек һан ҡылымы. | 1 | |
| 58 | | | Киләсәк заман ҡылымдарының һан, зат менән үҙгәреше. | 1 | |
| 59 | | | **Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек? Тест.** | 1 | |
| 60 | | | Текст менән эш | 1 | |
| 61 | | | **Телмәр үҫтереү. Изложение “Был ҡай саҡ була?”** | 1 | |
| 62 | | | Газета-журналдар һәм телевидение | 1 | |
| 63 | | | **“Һүҙ төркөмдәре” проект эше** | 1 | |
| 64 | | | Минең тормошомда компьютер | 1 | |
| 65 | | | Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек?үтелгәндәргә йомғаҡлау | 1 | |
| 66 | | | **Контроль диктант.Йәйге көн.** | 1 | |
| 67 | | | Хаталар өҫтөндә эш. Башҡорт уйындары | 1 | |
| 68 | | | Үтелгәндәрҙе дөйөмләштереп ҡабатлау. | 1 | |
| 69 | | | Үтелгәндәрҙе дөйөмләштереп ҡабатлау. | 1 | |
| 70 | | | Йомғаҡлау. | 1 | |

**Контроль үлсәү материалдары**
**уҡытыу туған (башҡорт) телендә**
**алып барылған кластар өсөн тәғәйенләнгән**

**Башҡорт теленән яҙма эш төрҙәре**
**Контроль диктант**

| Кластар | 1-се ярты йыллыҡ | 2-се ярты йыллыҡ |
|---|---|---|
| 3-се класс | - | 25-30 һүҙ |
| 4-се класс | 55-65 һүҙ | 60-70 һүҙ |

**Билдәләр:**
“5” – хатаһыҙ
“4”- 1-2 хата
“3” – 3-5 хата
“2” – 7-нән артыҡ хата

**Хаталар:**
1.Орфографик ҡағиҙәләрҙе боҙоу, хәрефтәрҙе төшөрөп ҡалдырыу, уларҙы һүҙ эсендә урындары йәки икенсе хәрефтәр менән алмаштырыу, артыҡ хәрефтәр ҡуйып яҙыу.
2.Программа буйынса өйрәнелгән һүҙлек һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙмау.
3.Өйрәнелгән орфографик ҡағиҙә буйынса бирелгән һүҙҙәрҙә хата ебәреү.
4.Изложение яҙғанда, әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙгәртеү.
5.Изложение яҙғанда, һүҙҙә мәғәнәһе буйынса дөрөҫ ҡулланмау.

**Иҫкәрмәләр:**
Контроль эште баһалағанда беренсе сиратта, уның дөрөҫ үтәлеше күҙ уңында тотола. Баланың үҙе тарафынан төҙәтелгән хаталар эште баһалауға тәьҫир итмәй (контроль күсереп яҙыу эшенән башҡа). Контроль күсереп яҙыуҙа ла баланың иң аҙаҡ башҡарған эше генә баһалана. Эштең дөйөм үтәлеү күренеше уны баһалауға тәьҫир итергә тейеш түгел. Әммә баланың каллиграфия яғынан эште башҡарыу һәләте иғтибарға алына.
Диктант өсөн текстар уртаса ауырлыкта алына. Тестағы һүҙҙәрҙең 60 проценты өйрәнелгән ҡағиҙәләргә тап килгән һүҙҙәр булырға тейеш. Әгәр текста яҙылышы таныш булмаған, өйрәнелмәгән һүҙҙәр осраһа, уҡытыусы уларҙы таҡтаға алдан яҙып ҡуя.

**Грамматик күнегеүҙәр**
Бындай эш төрҙәренең контроль диктанттан йәки контроль күсереп яҙыуҙан айырым бирелеүе яҡшы тип танылa. Грамматик күнегеүҙәр үҙ эсенә 2-4 эш төрөн алырға мөмкин.

**Билдәләр:**
“5”- хатаһыҙ башҡарылған.
“4” – күнегеүҙең ¾ өлөшө дөрөҫ башҡарылған.
“3” - күнегеүҙең ½ өлөшө дөрөҫ үтәлгән.
“2” – күнегеүҙең ½ өлөшөнән кәме генә дөрөҫ үтәлгән.

**Контроль күсереп яҙыу**
Һәр бер класс өсөн үҙ аллы күсереп яҙыу өсөн бирелгән текстарҙың күләме контроль диктант текстарына ҡарағанда 5-8 һүҙгә артыҡ тәҡдим ителә.

| Кластар | 1-се ярты йыллыҡ | 2-се ярты йыллыҡ |
|---|---|---|
| 3-се класс | 20-30 һүҙ | 30-35 һүҙ |

| | | |
|---|---|---|
| 4-се класс | 60-65 һүҙ | 65-75 һүҙ |

**Билдәләр:**
“5” – таҙа, матур, хатаһыҙ.
“4” - 1 хата йәки 1-2 төҙәтеү.
“3” – 2-3 хата.
“2” – 4 һәм унан да күберәк хата.
**Күсереп яҙыу тәртибе:**
1.Һөйләмде аңлар һәм хәтерҙә ҡалдырыр өсөн, ашыҡмай уҡыу.
2. Һөйләм хәтерҙә ҡалғанмы икәнлеген тикшереү өсөн, уны текстҡа ҡарамайынса ҡабатлау.
3.Күсереп яҙыла торған һөйләмдә орфограммаларҙы билдәләү.
4.Һүҙҙәр нисек яҙыла, шулай әйтеп уҡыла.
5.Һүҙҙәр нисек әйтелә, шулай ҡабатлау.
6.Тәүге ике тапҡыр һөйләм һүҙҙәрҙе нисек ҡабатлана, шулай әйтеп яҙыу.
**Изложение һәм инша яҙыу.**
Текстағы һүҙҙәр күләме:
2-се класс – 20-30,
3-сө класс – 30-40,һүҙ тәҡдим ителә.
**Баһалау:**
“5” – текстың йөкмәткеһе эҙмә-эҙлекле һәм дөрөҫ бирелгән, орфографик һәм стилистик хаталар юҡ, уҡыусы тарафынан 1-2 хата төҙәтеү эшләнгән.
“4” – текст йөкмәткеһен асыуҙа артыҡ күп булмаған ситкә китеү кәҙәтелә, 1-2 урында һүҙҙәрҙе дөрөҫ ҡулланмау осрағы бар, 1-2 орфографик хата ебәрелгән, 1-2 урында төҙәтелгән.
“3” – автор биргән текстан ситкә сығыу, фекер йөрөтөүҙә эҙмә-эҙлелек боҙолоу,2-3 һөйләмдең дөрөҫ төҙөлмәүе, һүҙлектең ярлылығы,3-6 орфографик хата, 1-2 төҙәтеү.
“2” – автор биргән текстың мәғәнәһен боҙоу, төп фекерҙең асылмауы, мөһим күренештәрҙең төшөп ҡалыуы, текст өлөштәре араһында бәйләнеш булмауы, текст йөкмәткеһе буйынса фекер юҡлығы, тел сараларының ярлылығы, 7-8 орфографик хата,3-7 төҙәтеү.

**3 класс**
**3-сө сирек.**
**Диктант ”Баҙарҙа”**
Бөгөн атайым менән баҙарға барҙыҡ.Бында кеше күп.Беҙ икмәк,шәкәр,он,һалма,һөт,печенье,алма һатып алдыҡ.

**“Мин һәм минең дуҫтарым” темаһы буйынса һорауҙарға яуап яҙыу.**
1. Йорт ҡоштарын һанап яҙ.
2. Ниндәй йорт хайуандарын беләһең?
3. Бесәйең йәки этең тураһында яҙ.

**3-се сирек.**
**Диктант.**
**Муйнаҡ.**
Минеңэтем бар. Уныңисеме – Муйнаҡ. Улйортһаҡлай. Муйнаҡтыңкөсөгө бар. Уныңкушаматы – Аҡбай. Улбикшаян.
**Грамматик бирем:**
Өсөнсө һөйләмде ижектәргә бүлеп яҙ.

**Контроль эш**
**Уҡы.Текстан һуң бирелгән эштәрҙе башкар.**
**Саңғы шыуыу**
Һалкын ҡыш етте. Ергә мамыҡ ҡар яуҙы. Ҡар өй баштарын, юлдарҙы, яландарҙы ҡапланы. Атаһы Фәриҙәгә яңы саңғы алып бирҙе.

Ял көнө балалар саңғы шыуырға сыҡты. Ап-аҡ ҡарҙы ярып, Рөстәм бара.Уның артынан Самат,Юлдаш,Ринат,Фәриҙә,Наилә һәм башҡа уҡыусылар теҙелгән.Талғын ел иҫә, көн йылы. Ошондай көндә саңғыла йөрөүе күңелле!
Балалар саңғы шыуырға өйрәнде.

1.Ҡалын хәреф менән бирелгән һөйләмдәрҙе күсереп яҙ. Беренсе һөйләмдә эйә менән хәбәрҙең аҫтына һыҙ.
2. Һүҙҙәрҙә нисә хәреф, өн,нисә ижек?
яңы- саңғы- йылы-
3.Текстан ҙур хәрефтән яҙылған һүҙҙәрҙе күсереп яҙ.Улар нимә аңлата?
4.Текстың геройҙарын билдәлә.
Фәриҙә Рөстәм балалар ҡыш
5.Һүҙҙәрҙе рус теленә тәржемә ит.
уҡыусылар- һалҡын-
саңғы- ел-
6.Текста нимә тураһында һүҙ бара?Дөрөҫ яуапты билдәлә.
Ҡыш тураһында.
Балалар саңғы шыуырға өйрәнә.
Фәриҙәгә яңы саңғы алдылар.

**4 класс**
**Контроль диктанттар.**
**Ҡар бөртөктәре.**
Әкрен генә ҡар яуа. Күп төрлө ҡар бөртөктәре биткә ҡуналар һәм ирейҙәр. Ишек алдында тауыҡтар йөрөй ине. Сыбар тауыҡ ҡар яуғанға аптырай. Ул ҡар бөртөктәрен беренсе тапҡыр күрә. Тауыҡ уларҙы суҡый. Ә ҡар яуа ла яуа. Бына ер өҫтө аҡ юрған ябынды. (44 һүҙ).
***Диктант***
**Бесәйем.**
Минең бесәйем һоро төҫтә. Уның ҡолаҡтары һаҡ, оҙон мыйыҡтыры тырпайып тора. Бесәйемдең йомшаҡ туны ебәк ке-ек йылҡылдай. Уның тырнаҡтары ҡоростай үткер, күҙҙәре ут кеүек янып тора.
Бесәйем иркә һәм хәйләкәр. Ул иркәләнеп мырылдай, күҙҙәрен йома, ҡойроғон болғай, һыртын көмрәйтә.
Көндөҙ бесәйем ҡояшта ҡыҙына, туйғансы йоҡлай, ә кисен һунарға сыға. Ул төн буйына сысҡандар ҡарауыллай.
<u>Эш.</u>
Е хәрефе булған һүҙҙәрҙе ижеккә бүлеп яҙ.
Һуңғы һөйләмдең баш киҫәктәрен билдәлә.
Бесәйҙен тасуирлаған өс һүҙҙе яҙ.
**Яҙ һулышы.**
Үҙенең күңелле шау-шыуына, сылтырап аҡҡан гөрләүектәренә, шартлап япраҡ ярған бөрөләренә наҙланып яҙ ҙа етте. Быйыл яҙ иртә килде. Тау биттәре ҡарҙан әрселеп, яҙҙың тәүге сәскәһе – умырзая күҙен асты. Ҡоштар ҙа, сыр-сыу килеп, Уралыма ҡайта башланы. Уларҙың тыуған ояларына ҡайтыуы үҙе бер байрамға әйләнә. Ҡоштар шатланышып һайрайҙар. Тыуған төйәктәре өҫтөндә өйөрөлә-өйөрөлә осоп йөрөйҙәр. Ошо күренеш үҙе бер тамаша, яҙҙың онотолмаҫ сағыу бер мәле.
**<u>Эш.</u>**
Беренсе һөйләмдә нәҙек һуҙынҡылар аҫтына бер. Ҡалын һуҙынҡыларға ике һыҙыҡ һыҙ.
Күплек ялғауы булған өс һүҙҙе күсереп яҙ

**Йәйге көн.**
Июнь – йылдың иң матур айы. Болон, туғайҙар гөрләп сәскә ата. Йылға, күлдәр өҫтөн томбойоҡ сәскәләре ҡаплай.Май, июнь – ҡоштарҙың бала сығарыу ваҡыты. Улар балаларына ашарға ташып бер була. Июлдә күбәләктәр оса. Бал ҡорто күс айыра.Июль – тәүге еләктәр айы. Иң тәүҙә ҡайын еләге бешә.(46 һүҙ).

**Күсереп яҙыу өсөн текстар.**

**Көҙ билдәктәре.**

Сентябрҙә ҡоштар көньяҡҡа китәләр. Көҙ көнө бөжәктәр әҙәйә.Ҡойолған япраҡтар араһында сысҡандар йүгерешә. Улар ояларына ҡороүлән ташыйҙар. Төлкөләр бесән, һалам кәбәндәре эргәһенә һыйыналар.Тейен, ҡуян, айыу, бүреләр йөндәрен ҡоялар.Бурһыҡтар, тейендәр ҡышҡа аҙыҡ әҙерләйҙәр.Сентябрь аҙағында терпеләр,ярғанаттар йоҡоға тала. (43 һүҙ)

**Һүҙлек диктанттары.**

**№1.**

Мәктәп, синыф, китапхана, уҡыусы, уҡытыусы, китапханасы, директор, йыйыштырыусы, белем, тәрбиә, тәрбиәсе, ашнаҡсы, кабинет, спорт залы, хеҙмәт.

**№2.**

Башҡортостан, Өфө, мәғрүр урмандар, бейек тауҙар, киң йылғалар, ҡалын урмандар, ҡырағай хайуандар, йәшел үләндәр.

**№3.**

Ғаилә, ҡәлғә, ил күрке, ғәзиз кешеләр, бәхетле, дөрөҫ юл һайларға, етмеш төрлө һөнәр, шат тауыштар.

**№4.**

Донъя, әҙәби донъя, ғәләм, йәмғиәт, рух, файҙалы ҡаҙылма, нефть, газ, район, ҡала, ҡасаба, үҙәк, соҡор.

**Ісиректә үтелгәндәр буйынса контроль эш**

1. Төшөп ҡалған хәрефтәрҙе яҙырға. Дописать пропущенные буквы.

| | | |
|---|---|---|
| Икм...к | бел...м | һ...йкәл |
| Хеҙм...т | халы... | бейе...се |

2. Исемдәрҙе күплек һанда ҡуйығыҙ. Поставьте слова во множественном числе.

Алма -
үлән -
урман -
кеше -
малай -

3. Өҙөктөң авторын һәм исемен билдәлә. Определите автора и название отрывка.

“Уларҙың өйөндә ярангөлдән башҡа хризантема, ләлә гөлдәре бар ине. Әлисә уларға көн аша һыу һибеп торҙо.”

а) Ф. Ғөбәйҙуллина. Тамырҙар.
б) Ә. Сөләймәнов. Яңы аш.
в) Т. Сәғитов. Футбол тубы.

4. Бирелгән исемдәргә сифатын (билдәһен) ҡуйып яҙ. Допишите прилагательные к словам.

................ күл, ............. төн, ................ урман, .................. уҡыусы, ................... ҡыш.

5. Ҡылымдарҙы юҡлыҡ формала ҡуй.

| | |
|---|---|
| Уҡый – | ярата - |
| Яҙа - | өшөй – |

6. Һөйләмдәрҙе башҡорт теленә тәржемә ит.

Я учусь в четвертом классе. В школе мы изучаем русский, башкирский, английский языки. Я люблю свою школу.

**IIсиректә үтелгәндәр буйынса контроль эш**

1. Төшөп ҡалған хәрефтәрҙе яҙырға. Дописать пропущенные буквы.

Баш…ортостан, к…с, там…р, фай…алы, иг…нсе, шөғ...л.

2. Дөрөҫ яуапты тап. Найди правильный вариант ответа.

Мөхәррәм бабай - :

а) балыҡсы

б) умартасы

в) урмансы

Әлисәгә өләсәһе нимә бүләк итте:

а) ҡурсаҡ

б) туп

в) ярангөл

Илшатка кем көс бирә?

а) икмәк

б) бутҡа

в) алма

3.Һүҙбәйләнештәр төҙөгөҙ. Составьте словосочетания.

| | |
|---|---|
| Буш | юл |
| Тигеҙ | бал |
| Кәрәҙле | төп ризыҡ |
| Икмәк | ваҡыт |

4.Һүҙҙәрҙе тәржемә итегеҙ. Переведите слова.

Сәйәхәт -

Йәйәү -

Шөғөлләнәм -

Күстәнәс-

Ҡәҙерле -

Ғалим -

5. Һорауҙарға тулы яуап бирегеҙ. Дайте полный ответ на вопросы.

Һин буш ваҡытыңда нимә эшләйһең?

Нимә менәнсәйәхәт итәләр?

Һин мәктәпкә нимә менән киләһең?

**IIIсиректә үтелгәндәр буйынса контроль эш**

I.Тексты иғтибар менән уҡып сығығыҙ һәм эстәлеген аңларға тырышығыҙ.

Внимательно прочитайте текст и попытайтесь понять его содержание.

Башҡортостан – беҙҙең тыуған төйәгебеҙ. Башҡортостан – башҡорт иле тигән һүҙ. Башҡортостан Республикаһының баш ҡалаһы - Өфө. Өфөлә бик күп халыҡтар йәшәй. Улар дуҫ, татыу йәшәй.
Башҡортостан ерендә йылғалар, күлдәр бик күп. Бында иң ҙур йылға – Ағиҙел. Ул Кама йылғаһына ҡоя. Башҡортостанда күлдәр ҙә бик күп. Иң ҙур күл – Асылыкүл.
Башҡортостан һыуыҡ көндәре менән Себерҙе, шифалы һыуҙары менән Кавказды, көслө елдәре менән тайганы хәтерләтә.

II. Текст буйынса һорауҙарға яуап бирегеҙ. Бер генә дөрөҫ яуапты билдәләгеҙ.
Ответьте на вопросы. Отметьте один правильный ответ.
1. Башҡортостандың баш ҡалаһы нисек атала?
а) Салауат;
б) Өфө;
в) Стәрлетамаҡ.
2. Башҡортостан ерендә нимәләр күп?
а) йылғалар,күлдәр;
б) халыҡтар, кешеләр;
в) машиналар, автобустар.
3. Башҡортостанда иң ҙур йылға?
а) Ҡариҙел;
б) Дим;
в) Ағиҙел.
4. Башҡортостан һыуыҡ көндәре менән нимәне хәтерләтә?
а) тайганы;
б) Себерҙе;
в) Кавказды.
5. Республикала халыҡтар нисек йәшәй?
а) дуҫ;
б) матур;
в) көслө.
6. Тәржемә итегеҙ. Переведите.
Тыуған төйәк -
Халыҡ –
Баш ҡала –
Һыуыҡ көндәр –
Дуҫ йәшәй –
7. Аҫтына һыҙылған һөйләмдәрҙе рус теленә тәржемә итегеҙ. Переведите на русский язык подчеркнутые предложения и запишите.
______________________________________________________________________________
______________________________________________________________________________
_______________________________________________
_______________________________________________

8.Текстҡа исем бирегеҙ.
Озаглавьте текст.
_______________________________________________
9. Тыуған төйәк һүҙенең синонимдарын яҙығыҙ.
Напишите синонимы слова тыуған төйәк.

**IVсиректә үтелгәндәр буйынса контроль эш**
1.Һүҙҙәрҙе тәржемә итегеҙ. Переведите слова.
Тәбиғәт –
Һыбайлы -
Шәхес –
Мәмерйә –
Ғалим –

Рәссам -

2. Дөрөҫ яуапты тап. Найди правильный вариант ответа.

Шүлгәнташ мәмерйәһе ҡайҙа урынлашҡан?

а) Өфө районында;

б) Бөрйән районында;

в) Салауат районында.

Башҡорт халҡының рус халыҡтары менән дуҫлығын нимә сағылдыра?

а) Салауат Юлаев һәйкәле;

б) Дуҫлыҡ монументы;

в) Шүлгәнташ мәмерйәһе.

Башҡортостан сатнама һыуыҡтары менән нимәне хәтерләтә?

а) Себерҙе;

б) тайганы;

в) Кавказды.

3. Һорауҙарға яуап бирегеҙ. Ответьте на вопросы.

Башҡорт аты ниндәй?

______________________________________________________________________________________________
______________________________________________________________

Беренсе башҡорт рәссамы кем ул?

______________________________________________________________________________________________
______________________________________________________________

Башҡорт дәүләт халыҡ бейеүҙәр ансамбле кем исемен йөрөтә?

______________________________________________________________________________________________
______________________________________________________________________________________________
_____________________________________________

4.Һөйләмдәр төҙөгөҙ. Составьте предложения.

| | |
|---|---|
| Зәки Вәлиди | кешенең хеҙмәттә лә, яуҙа ла юлдашы |
| Башҡорт аты | бөйөк рәссам |
| Муса Мортазин | күп телдәр белгән |
| Ҡасим Дәүләткилдеев | халҡыбыҙҙың ҡаһарман улы |

5. Төшөп ҡалған хәрефтәрҙе яҙырға. Дописать пропущенные буквы.

Баш…ортостан, я…ыусы, …алим, ш…хестәр, бейе...се, йырс…, рәсс…м, һыб…йлы.

6.Һөйләмдәрҙе төҙәтеп яҙығыҙ. Исправьте предложения.

Батыры, халыҡ, Салауат, Юлаев, башҡорт.

Мәмерйәһе, Шүлгәнташ, районында, Бөрйән, урынлашҡан.

Башҡортостандың, матур, бай, тәбиғәте.